Алайгировская сельская библиотека

# *«Историю былых времен храня…»*

*Районный краеведческий конкурс*

## *90-летию Кармаскалинского района*

*2020 год*



# ,,Йырҙарыңа табынам,,

Ауылдашыбыҙ-йырсы,уҡытыусы,шағир

Фәрит Юныс улы Әғзәмовҡа арнала

Эстәлеге;

1. Ф.Әғзәмов тураһында инеш һүҙ
2. Биографияһы
3. Ф.Әғзәмовтың тормош юлына һәм ижадына ҡыҫҡаса байҡау
4. Авторҙың шиғырҙары
5. Ҡулланылған әҙәбиәт

# Фәрит Әғзәмов тураһында инеш һүҙ

Хозур тәбиғәтле Алайғыр ауылында тыуып үҫкән был егеттең яҙмышы тиҫтерҙәренән бер нимәһе менән дә айырылмай кеуек.

Хеҙмәт юлын Фәрит Юныс улы Алайғыр ауыл фермаһында, көтөүсе булып башлай. Төрлө эштәрҙә сыныға.Ошо фермала эшләгән осорҙа, премияға бирелгән ике быҙау, ишле ғаиләнең оло ҡыуанысы була.

Белемгә ынтылған егет күрше Иҫке Бәпес ауылында 10 синыфты бөтөргәс, уҡыуын Стәрлетамаҡ Педагогия институтында дауам итә.

Тормош тигәнең серле төшөнсә бит ул! Уны ҡайһы берәүҙәр бер нимәгә бошонмай,һәүетемсә генә дауам итһә, икенселәр ялҡынланып, сәмләнеп, донъяның йәмен- тәмен белеп йәшәй, ижад итә.

Фәрит Юныс улы ла шул икенселәр тоҡомонан. Стәрлетамаҡ лицей-интернатында тәрбиәсе булып эшләү менән бер рәттән, матур шиғырҙар яҙа. Ауыл тормошон тасуирлаған мәҡәләләре район һәм үҙәк баҫмаларҙа баҫыла.

Шул илһамлы эшмәкәрлек һөҙөмтәһе булып, «Йырҙарыңа табынам», «Стәрлем минең», «Йәйғор» исемле китаптары баҫылып сыға. Һуңғараҡ «Һыусумған», «Бағышлауҙар», «Пародиялар һәм ваҡ хикәйәләр йыйынтығы» донъя күрә.

Моңло йырсы булараҡ та танылыу таба Фәрит Юныс улы. «Халҡым моңо» конкурсында ҡатнашып лауреат дәрәжәһе лә ала.

Алдағы көндәргә ҙур пландар менән йәшәгән Фәрит ағайҙы ауыр сир аяктан йығып, 2009 йылда яҡты донъянан алып китә.

Был яҙмаларҙа мин бөгөн Фәрит Юныс улының тормош юлы һәм әҙәбиәтенә байҡау яһамаҡсы булдым. Ауылдаштары уның ижадын яраталар, шиғырҙарын яттан һөйләйҙәр.

Бына шулай тыуған яғының гүзәл тәбиғәтен данлап, йәшлеген һағынып, моңайып та, йылмайып та йәшәне һәм ижад итте Фәрит ағай.

# Биографияһы

1938 йылдың 27 декабрь айында, Ҡырмыҫҡалы районы Алайғыр ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа.  Тыуып-үҫкән ауылында 7 йыллыҡ мәктәпте тамалағандан һуң, 1954-1956 йылдар Алайғыр һөтсөлөк фермаһында көтөүсе булып эшләй. Эшләгән эшен юғары баһалап колхоз етәкселеге Фәритте ике тапҡыр быҙау менән бүләкләй.

1958-1960 йылдар Фәрит Юныс улы Алайғыр фермаһы мөдире ваифаһын башҡара.

Ләкин уҡырға,юғары белемле булырға ынтылған егет, бының менән генә туҡталып ҡалмай.  Үҙен генә ҡайғыртып ҡалмай, ул бүтәндәрҙе лә уҡырға өгөтләй.

,,Уҡымышлы һәм арҙаҡлы ил улдарын

Халҡы көтә, иле көтә, ир ҡот данын”- тип мәҙәниәтлелеккә өгөтләй.

Һәм 1960-1961 йылдар  Иҫке Бәпес ауылында 10 синыфты тик яҡшы билдәләренә генә тамамлап, уҡыуын Стәрлетамаҡ Педагогия институтында дауам итә. Ошо йылдарҙа беренсе шиғырҙары донъя күрә.

1961-1966 йылдар Фәрит Юныс улының күңелендә яҡты хәтирәләр ҡалдыра. Институт тамалаған йәш белгес эш юлын Архангель районы Абзан ауылында физика уҡытыусыһы булып эш башлай. Мәктәп менән бер рәттән Профессиональ техник училещела уҡыу- уҡытыу мөдире эшен дә алып бара.

1963 йылда йәштәрҙе политик  яҡтан үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн, Фәрит Юныс улын Башҡорт Обком ВЛКСМы Почет Грамотаһы менән бүләкләй һәм Почет Китабына исемен индерә.

1972-1992 йылар Стәрлетамаҡ ҡалаһында 77се һанлы училищела физика уҡытыусыһы булып эшен дауам итә. Оҙаҡ йылдар эшләү мәлендә бик күп почет грамоталары Һәм маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнә. Ошо йылдар эсендә ул шулай уҡ ,,Халыҡ мәғәриф отличнигы" тигән юғары исемгә лә лайыҡ була.

Республикала уҙғарылған ,,Оҙон көй" башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусылар конкурсында 1-се һәм 2-се дәрәжә лауреат, Стәрлетамаҡ ҡалаһында уҙған ,,Халҡым моңо" конкурсында 3се дәрәжә дипломаты була.

2004 йылдан Фәрит Юныс улы хаҡлы ялға сыға. Алдағы көндәргә ҙур пландар ҡуйып ,,Һыусумған", ,, Көлтә буйлыҡ шуҡ малай" исемле хикәйәләр йыйынтығын сығарам тип йөрөгән мәлдә,ауыр сир аяҡтан йыға. Яҙылмаған күпме шиғыҙарын, йырланмаған моңдарын үҙе менән бергә алып 2009 йылда, яҡты донья менән хушлашты.

# Фәрит Юныс улы Әғзәмовтың ,,Йырҙарыңа табынам,, исемле шиғырҙар китабынан шиғырҙар



Күңел күлемде гиҙә.

## Беҙ - «Ҡарға»лар

«Ҡарға» тиҙәр беҙҙең зат—ырыуҙы,
Һәм миңә лә уны таҡтылар.
Икмәк шүрлектәрен төйә торҙом...
Аяҡ аҫтарымда яттылар.

Быны күреп атай шелтә бирҙе
Ҡайыш менән миңә кисенә.
— Ҡушаматың менән ғорурлан, — ти
Төшөрҙө ул тағы иҫемә.

Борон замандарҙа һунарсылар
Бөркөт менән һунар сыҡҡандар.
Беҙҙекеләр ҡарға менән сығып
Төлкө алған, бүре һуҡҡандар...

Бына шунан алып ут - ҡушамат
Ғорурлығы беҙҙең нәҫелдең.
Икмәк шүрлегенә менеп кенә
Төшөрмәмен инде бәҫемде.

## Тыуған яғым минең

Тыуған яғым минең гөл баҡсалы...
«Ташлыҡ» тигән тауҙар ҡаршымда
Урман уртаһында ҡая ташым
Тиртеп тора йөҙөк ҡашындай.

Маһир бөркөт һипләп оя ҡора
Һайлап алған текә ҡаяны.
Тымыҡ күлдә ике аҡҡош йөҙә —
Ғүмеркәйҙәр булмаç аяныс...

Яҙмыш мине һәр саҡ ситкә бырғый —
Алыҫая ҡайтыр юлдарым.
Бөркөт саңҡыуына бер тертләһәм,
Мең тертләйем яҙһам йырҙарым.

Аҡҡош ҡына ғүмеркәйе кемдә
Аҡҡош ҡына күле ҡай ерҙә?
Йөҙөк ҡашым төшөп юғалғанда
Кәрәк ирҙәр — бөркөт маһирҙар.

## Серле «Һыусумған»

Яҙғы ташкын... Тыныс шишмә һыуы.
Һыусумғанға табан юл ала.
Ҡая ташка килеп бәрелә лә
Тау аҫтына төшөп юғала.

Быны мәҙәк табып баласаҡтан
Бөгөнгәсә әле баш ватам:
«Тау аҫтына инеп юғалған һыу
Барып сыға икән ҡай яҡтан??»

Тау-таштарҙың әгәр теле булһа
Әйтеп бирер ине серҙәрен...
. . . . . . . . . . .
. . . . . . . . . . .

Ауыр мәлдә ҡайсаҡ дуç-иштәрҙең

# «Һелкәүестә «тәмле малай»

Бигерәк йомарт булған әсәй минең,
Күрше — күлән булған шуға бик шат.
Йомартлығын белеп әбей – һәбей
Керә икән барып һорап ҡат – ҡат.
Он иләгеп һалып һелкәүескә,
Икмәк һалмаҡ булып бөгөн киске.
Быны күреп күрше һәүербикә
Шундуҡ килгән һорап он ыҙмаҡҡа.
Биргән өсөн уға һелкәүесләп,
Әбей риза, тора ул лапылдап.
Шунан сығып һыҙа ондо алып,
Рәхмәтен дә әйтмәй доға ҡылып.
Биләп һалған мине һелкәүескә,
Үҙе сығып киткән һалауыҡҡа.
Быны күреп йылғыр Йомабикә
Килгән өмөтләнеп һелкәүескә.
Тиҙ-тиҙ генә алып һелкәүесте
Ҡайтҡан, ут ҡабыҙған мейескә.
Ҡамыр баҫмаҡ булып алған күмәк
Һыу ҡойоп үрәлгән һелкәүескә.
Сеү! Был ни? Ҡыбырҙай һелкәүестә!



# Минең Зәйнәп гөлдәр һөйә

**(Йыр)**

Минең Зәйнәп гөлдәр һөйә
Сәскә уның күңеле.
— Мин дә ергә төштөм, — тиеп
Ҡояш иркәләй гөлөн.

**Ҡушымта:**

Гөл сибәре — Зәйнәбемдә
Ҡояш ҡайҙарҙан белгән?..
Алһыуланып, шат йылмайып
Иртә таңдарҙан килгән.

Нур баҡсамда — гөл баҡсамда
Хуш еҫтәр аңҡып тора.
Ҡояш та бик шаян икән
Күҙ ҡыҫып балҡып тора.

**Ҡушымта.**

Осоп—ҡунып Гөлзәйнәбем
Һыуҙар һибә гөлөнә.
Ҡояш була алһам икән
Күбәләктәр иленә.

**Ҡушымта.**

XXX

Әлдә генә дуҫ-иштәр күп
Ауыр мәлдә — ярҙамға.
Онотмамын һеҙҙе, дуҫтар,
Йөрәһәм дә ҡайҙарҙа.

Юҡҡа ғына әйтмәгәндәр:
«Йөҙ һум аҡсаң булғансы —
Йөҙ иптәшең булһын!», — тип.
. . . . . . . . . . .
Серләш күңел тулғансы.

## Тыуған яғым минең

Тыуған яғым минең гөл баҡсалы..
«Ташлыҡ» тигән тауҙар ҡаршымда
Урман уртаһында ҡая ташым
Тиртеп тора йөҙөк ҡашындай.

Маһир бөркөт һипләп оя ҡора
Һайлап алған текә ҡаяны.
Тымыҡ күлдә ике аҡҡош йөҙә —
Ғүмеркәйҙәр булмаç аяныс...

Яҙмыш мине һәр саҡ ситкә бырғый —
Алыçая ҡайтыр юлдарым.
Бөркөт саңҡыуына бер тертләһәм,
Мең тертләйем яҙһам йырҙарым.

Аҡҡош ҡына ғүмеркәйе кемдә
Аҡҡош ҡына күле ҡай ерҙә?
Йөҙөк ҡашым төшөп юғалғанда
Кәрәк ирҙәр — бөркөт маһирҙар.

## Серле «Һыусумған»

Яҙғы ташҡын... Тыныс шишмә һыуы.
Һыусумғанға табан юл ала.
Ҡая ташҡа килеп бәрелә лә
Тау аçтына төшөп юғала.

Быны мәҙәк табып баласаҡтан
Бөгөнгәсә әле баш ватам:
«Тау аçтына инеп юғалған һыу
Барып сыға икән ҡай яҡтан??»

Тау-таштарҙың әгәр теле булһа
Әйтеп бирер ине серҙәрен...
. . . . . . . . . .
. . . . . . . . . .

Ауыр мәлдә ҡайсаҡ дуç-иштәрҙең

Хозур тәбиғәтле Алайғыр ауылында тыуып үҫкән был егеттең яҙмышы тиҫтерҙәренекенән әллә ни айырылмай көйөк.

Хеҙмәт юлын Фәрит Алайғыр һөтсөлөк фермаһында ябай кетеүсе булып башлай, төрлө эштәрҙә сыныға, пре-

[illegible] булып эшләй һәм [illegible] тиата хаҡлы ялға сыға.

Тормош тигәнең бик серле төшөнсә бит ул. Уны берәүҙәр һәүетемсә генә итеп, бер нимәгә лә әллә ни артыҡ көс һалмай, янмай-көймәй генә уҙғарһа, икенселәр быҫҡып түгел, донъяның йәмен-тәмен

[illegible] нуҡтә икеләтә, ослатә дәртләнеп яҙыша башлай Фәрит. Шул илһамлы эшмәкәрлек һөҙөмтәһе булараҡ, 90-сы йылдарҙа „Йырҙарыңа табынам", „Йәйғор", „Стәрлем минең" исемле китаптары сыға. Һуңыраҡ „Һыуһаған" шиғырҙар йыйын-

# Һаумы, һаумы, Алайғырым!..

миңға ике тапҡыр быҙау ҙа ала. Был уларҙың ҙур ғаиләһе өсөн ярайһы уҡ ярҙам булып ҡала. Артабан уны һөтсөлөк фермаһына мөдир итеп үрләтәләр. Белем яғы самалы икәнен һиҙеп, Иҫке Бәпес мәктәбенең 10 синыфына уҡырға барырға ҡарар итә. Әйткән һүҙ - атҡан уҡ, тигән бит боронғолар. Урта белем алған егет хәҙер яңы уй-хыялдар менән яна башлай. Улар уны Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына алып килә лә инде.

Йәш белгес - физика уҡытыусыһын Архангель районы Абҙан урта мәктәбенә ебәрәләр. Хозур тәбиғәтле, урман-йылғаларға бай был төбәк уға ифрат оҡшаһа ла, яҙмыш үҙенекен итә. Инде 5-6 йыл буйына ярайһы ғына тәжрибә туплаған егет Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы 77-се һанлы профессиональ техник училищеһына эшкә урынлаша һәм ике тиҫтә йыл ғүмерен яратҡан эшенә бағышлай. 1992 йылдан иһә 2-се һанлы лицей-интернатта тәрбиәсе



белеп, ялҡынланып йәшәй һәм ижад итә.

Фәрит Юныс улы Әғзәмов та шундайҙар тоҡомонан. Уның тәүге хәбәрҙәре 1958 йылда уҡ район гәзите биттәрендә донъя күрә. Ауыл тормошон тасуирлаған мәҡәләләре, хеҙмәт кешеләре хаҡында һүрәтләмәләре әленән-әле баҫылып тора. Һуңынан донъя мәшәҡәттәре күбәйеп-ме, башҡа төрлө сәбәптәр буйынсамы, байтаҡ йылдарға һуҙылған „торғонлоҡ" осоро башлана. Ләкин күңел түрендә ҡабынған ижад утын һүндереү

тығы, „Бағышлауҙар", „Пародиялар һәм вах хикәйәләр йыйынтығы" донъя күрә.

Бына шулай, дүрт тиҫтә йылға яҡын уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеге осоронда Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы Фәрит Юныс улы физика фәнен уҡытып ҡына ҡалмай, шиғырҙар ҙа яҙа. Уға шаяртып тағылған „физик-лирик" ҡушаматы һис үпкәләрлек түгел. Бынан тыш, һәүәҫкәр йырсы булараҡ, бер нисә йыл рәттән „Халҡым моңо" конкурсында ҡатнаша һәм лауреат була. Был турала төрлө йылдарҙа төшкән иҫтәлекле фоторәсемдәре, күп һанлы Маҡтау ҡағыҙҙары һөйләй.

Бына шулай тыуған яғының гүзәл тәбиғәтен данлап, йәшлеген һағынып, бер аҙ моңайып, әммә яҡты таңдарға өмөт итеп йәшәй, ижад итә Фәрит Әғзәм улы үҙенең 68-се ҡышын ҡаршылағанда. Уңыштар юлдаш булһын һиңә, ауылдаш!

Әлфиә ИРМӘКОВА,
уҡытыусы.

## Ҡылған сәсле ағай

*Тыуған көнөмдә ҡотларға*
*Дуҫ-иш, туғандар ҡайтҡан.*
*Иркәләпме әйтә улар:*
*Ҡылған да сәскә атҡан.*
*Ҡылған сәсле ағай булып*
*Ултырам хәҙер түрҙә.*
*Ә бит йөрәккәйем һаман*
*Ҡартайыу белмәй бер ҙә.*

***

## Ҡышым килде

*Һағынып та көткән ҡунаҡ*
*һымаҡ,*
*Мамыҡ шәлен элеп еләргә,*
*Көмөш нурҙар һибер тирә-йүнгә*
*Ҡышым килде алыҫ ерҙәрҙән.*
*Аҡ ҡапастар көйҙө пәләш*
*таууҙар...*
*Сихри күпер, аңа таран һыу...*
*Сыптыр шишмә йырҙарынан*
*тынды,*
*Ахыры шуға бер аҙ ямандыу.*

***

## Алайғырым

*(йыр)*

*Алайғырым, һиңә ҡайтһам*
*Күңелемдә моң арта.*
*Ҡабыналар шатлыҡтарым,*
*Мәхәббәтем йырлата.*

*Ҡушымта:*
*Алайғырым, гүзәлем,*
*Өҙөләләр үҙәгем,*
*Өҙөләләр үҙәгем.*

*Һиңә ҡайтһам - һандуғасмын,*
*Сор ҡошсоҡтай һайрата.*
*Һаумы, һаумы, Алайғырым,*
*Һағыныуҙарым йырлата.*
*Ҡушымта.*

***

*Йөрәгемә боҙ һалҡыны*
*һеңгән,*
*Йылыта ла алмаҫ наҙҙарын.*
*Яҙмыш һуҡмаҡтары - ялғыш-*
*ялғыш,*
*Алыҫая йәшлек яҙҙарым.*
*Кире килмәҫ йәшнәү-*
*йәшлектәрем*



*Юлдарымдан уреп ҡайтһам да,*
*Өмөт шәме әле яна һаман.*
*Таңдар яҡты... Яҡты яҙҙар*
*һаман*
*Йөрәгемдә боҙҙар ятһа ла.*

## Йырҙарыңа табынам

Мин мөкиббән һинең йырҙарыңа...
Төштәремә йырлап керәһең.
Шатлыҡ өҫтәр дәртле моңоң менән
Йәшәү сәмен миңә өрәһең.

Осоп ҡына ҡуныр ҡошсоҡмон мин
Өҙөләп тә һине һағынһам.
Бәхетлемен, дуҫым, бәхетлемен!
Йырҙарыңа һинең табынам...

## *Болондарҙа үҫте сәскә*

(Йыр)

Болондарҙа үҫә сәскә

# Ҡулланылған әҙәбиәт

1. Агзамов Ф. Йырҙарыңа табынам.- Стерлитамак,1990.- 30 с
2. Ирмәкова Әлфиә „Һаумы, Һаумы Алайғырым".- Даирә